МУНИЦИПАЛЬ МӘКТӘПКӘСӘ БЕЛЕМ БИРЕҮ БЮДЖЕТ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ
БАЛА ҮҪТЕРЕҮ ҮҘӘГЕ – “АҠБУҘАТ” БАЛАЛАР БАҠСАҺЫ

***Күңел асыу сараһы:***

# "Һабантуйға килегеҙ!"

# *Һабантуй байрамы*

***Маҡсат*:**

- Балаларҙы халыҡ байрамдары, йолаары менән таныштырыуҙы дауам итеү;
- Йырлау,бейеү һәләттәрен,етеҙлек һәм дуҫлыҡ сифаттарын үҫтереүгә булышлыҡ итеү;
- Ҡунаҡсыллыҡ һәм халыҡ уйындарын уйнарға теләк булдырыуҙы тәрбиәләү.

***Йыһазландырыу***: халыҡ кейемдәре, уйындарға кәрәк реквизиттар:ағас аттар, таяҡтар, тоҡтар, арҡан, яулыҡтар, көршәк һ.б.

***Байрам барышы.***



Байрам тышта саф һауала уҙғарыла.Алып барыусы сыға.

**Алып барыусы:**

Һабан туйы,хеҙмәт туйы

Шатлыҡ менән бәхет туйы

Байрам булһын көн буйы

Ҡотло булһын байрамдар!

Йәмле һабан туйҙары!

Һаумыһығыҙ балалар, хәйерле көн ҡунаҡтар. Һеҙҙе барығыҙҙы ла күңелле һабантуйға саҡырабыҙ,уйнап-көлөп,йырлап-бейеп күңел асайыҡ бергә.

**Алып барыусы**:Һабантуй-ул һабан байрамы,хеҙмәт байрамы.Баҫыуҙарҙа сәсеү тамамланыу менән уҙғарыла был күңелле байрам. Бар халыҡты,балаларҙы йыя,дуҫлаштыра ул Һабантуй.Беҙҙең балалар ҙа Һабантуй

тураһында күпте beләләр,үҙҙәренең шиғырҙарында әйтеп үтерҙәр.Әйҙәгеҙ рәхим итегеҙ балалар,һүҙ һеҙгә.(Балалар шиғырҙар һөйләйҙәр)

**Алып барыусы:** Ә хәҙер беҙҙең бәхетле баласаҡка,күңелле байрамға ҡыуанып бергәләп йырлап алайыҡ.

***Йыр "Нурлы баласаҡ"***

**Алып барыусы**:Рәхмәт һеҙгә балалар һәм дә килгән ҡунаҡтар. Бөгөнгө байрамға минең ярҙамсыларым килергә тейеш инеләр,тик ниңәлер оҙаҡлайҙар.Һеҙ күрмәнегеҙме балалар?Ишетәһегеҙме күңелле көй яңғырай,әйҙәгеҙ алҡышлап минең ярҙамсыларымды ҡаршы алайыҡ.



*Өс клоун киләләр: Чупа, чупс,Бим-бом.*

**Алып барыусы**: Һаумыһығыҙ,бына һеҙҙә килеп еттегеҙ.Нисек килеп еттегеҙ?Балалар әйҙәгеҙ бергәләп ҡунаҡтар менән һаулыҡ һорашып алайыҡ.

**Чупа**:Бына һеҙ ҡайҙа йыйылғанһығыҙ икән?

**Бим-бом**:беҙ үҙебеҙ менән бөгөнгө байрамға бик күп уйындар алып килдек.

**Чупс:**һеҙ әҙерһегеҙме төрлө уйындар уйнап,ярыштарҙа көс һынашырға?

**Алып барыусы**: Әлбиттә әҙерҙәр,беҙҙең балалар Һабантуй байрамын һағынып көттөләр,бик күп көстә йыйҙылар.

**Чупа:** Әйҙәгеҙ уйын-ярыштарҙы башлар алдынан тәндәребеҙҙе яҙып алайыҡ.

**Чупс**:Әйҙәгеҙ беҙ тик риза ғына.

***Физминутка "Дюймовочк студияһында"***



**Алып барыусы**: Рәхмәт һеҙгә,ә хәҙер барығыҙҙы ла уйнарға саҡырабыҙ.

Бөгөн беҙҙә Һабантуй

Эштәреңдең барһын ҡуй

Тиҙерәк йүгер майҙанға

Байрам башлана унда!

Күңелле һабантуйҙары

Бөгөн байрам,ҙур байрам

Матур йырҙар,шат бейеүҙәр

Уйнайбыҙ,ярышабыҙ!

Өс клоун уйын майҙансыҡтарында уйындар,ярыштар үткәрәләр.

***Уйындар:***



- *“Тоҡ кейеп йүгереү”*
- *“Көршәк ватыу”*
- *“Ҡалаҡ менән йүгереү”*
- *“Ат сабышы”*
- *Таланттар бәйгеһе.*

**Алып барыусы:**

ЙЫРҘАР ТЫҢЛАЙЫҠ
ЙЫРЛАЙЫҠ,ОТАЙЫҠ,
ЙЫР КҮҢЕЛДЕ ЙЫЛЫТА
ӘЙҘӘ ЙЫРЛАП ЙӘШӘЙЕК ДУҪТАР
ЙЫР ДУҪЛЫҠТЫ НЫҒЫТА.

***ЙЫР “БӘХЕТ ӨСӨН”***



**ЧУПА:**Ә ХӘҘЕР БАРЫҒЫҘҘЫ ЛА КҮҢЕЛЛЕ БЕЙЕҮГӘ САҠЫРАБЫҘ.

**БИМ-БОМ**:ӘЙҘӘГЕҘ ТҮҢӘРӘККӘ ТОРАЙЫҠ,ҠУЛҒА-ҠУЛ ТОТОНАЙЫҠ.

**ЧУПС:** КҮМӘКЛӘШЕП БЕҘҘӘ ДУҪТАР
БЕЙЕП АЛАЙЫҠ ӘЙҘӘ ӘЛЕ
ҠОТЛО БУЛҺЫН ГӨРЛӘП ТОРҺОН
ҺАБАНТУЙҘАР БАЙРАМЫ!



***КҮҢЕЛЛЕ ПОЛЬКА***



**АЛЫП БАРЫУСЫ:**КҮҢЕЛДӘРГӘ ЯЛ БИРГӘН,ЙӘНГӘ ЙЫЛЫ БИРГӘН ҺАБАН ТУЙЫ УҘЫП БАРА,ҺАБАНТУЙ БЫУЫНДАРҒА ДӘРТ,ЙӨРӘКТӘРГӘ ҠӨҘРӘТ ҺӘМ ҠЕҮӘТ,ЙӘНДӘРЕБЕҘГӘ ИМЕНЛЕК ТЫНЫСЛЫҠ ИНДЕРҺЕН.ИЛ-ЕРЕБЕҘ ТЫНЫС, ДУҪТАР ҺАУ-СӘЛӘМӘТ БУЛҺЫНДАР,ТАБЫНДАР МӨБӘРӘК БУЛҺЫН.КИЛӘҺЕ ОСРАШҠАНҒА ТИКЛЕМ!